# ЕҢЕҮ БАЙРАМЫ ҺӘМ ВЕТЕРАНДАР ТУРАҺЫНДА ШИҒЫРҘАР

Еңеү! Ҡояш балҡый бер битеңдә,
Бер битеңдә моңһоу ай һаман,
Бер күҙеңдән шатлыҡ нуры һибелә,
Бер күҙеңдән һаман йәш тама...
(М. Кәрим)

## ЕҢЕҮ КӨНӨ

Еңеү көнөн, тимен, юҡҡа ғына
Май айында байрам итмәйҙәр.
Юҡҡа ғына ләйсән ямғыры ла
Ерҙең битен йыуып үтмәйҙер.
Өр-яңынан тыуа тыуған Ерем,
Өр-яңынан ала һулышты.
Умырзая морнап, баш ҡалҡыта,
Ҡаплап эҙен яуҙың, һуғыштың.
Юҡҡа ғына, тимен, ҡыр ҡаҙҙары
Яҙҙар менән ҡайтмай иленә.
Яуҙа ауған һалдаттарҙың рухы
Беҙҙең менән бергә һөйөнә.
Юҡҡа түгел, тимен, йәм-йәшелдән
Йәшәү төҫөн кейә урмандар.
Яуҙан ҡайтҡан яугир олатайға
Алмаш булып үҫә уландар.

Үтте йылдар, үтер быуаты ла
Онотолмаҫ шанлы үткәндәр.
Еңеү өсөн беҙҙең олатайҙар
Берлинғаса барып еткәндәр.

Яҙҙар һайын хистәр яңырғанда
Яңыралар иҫке яралар.
Олатайым һүҙе сыңлап китә:
"Һеҙгә ҡала илем, балалар."
Васыяты ошо олатайҙың:
"Һеҙгә ҡала, улым, киләсәк!"
Именлеге илдең беҙҙең иңдә
Беҙ һаҡларбыҙ һине, Ер-Әсә!
(А.Айытҡолова)

## ОЛАТАЙЫМ

Орден, миҙалдар тағып,
Киң майҙан буйлап атлай.
Шундай мөһәбәт, олпат,-
Ул бит минең олатай.
Батыр һалдат булған ул,
Дошманды ҡырған яман.
Һыҙғаныулы еңдәре,
Көслө лә ғорур һаман.
Ҡыйыу булып үҫергә
Мине лә сыныҡтыра.
Ныҡ бул, ебеп төшмә, тип
Киҫәтеп кенә тора.
Олатайым кәңәштәрен
Күңелемдә һаҡлармын,
Мин бит һалдат ейәне,
Ышанысын аҡлармын.
(Ф.Рәхимғолова)

## 9 МАЙ БАЙРАМЫ

9 Май көнөндә
Әхмәтгәрәй олатай
Килде мәктәпкә ҡунаҡҡа,
Таяҡ тотоп ул атлай.
Һуғышта булған олатай,
Бик күп орден-миҙалы.
Һөйләне ул яу юлдарын
Нисек итеп уҙғанды.
“Бөйөк еңеү, - ти олатай, -
Изге байрам, балалар,
Байрам итә илебеҙҙә
Бөтөн ауыл, ҡалалар!”
Сәскәләр бирҙек беҙ уға,
Күрһәттек йырлап, бейеп.
Еңеү Бөйөк булған өсөн
Ветерандар ҙа бөйөк.
(А.Шафиҡова)

## ОЛАТАЙЫМ – ВЕТЕРАН

Дошман баҫып ингәс илгә
Ҡол итмәк булып беҙҙе,
Олатам киткән һуғышҡа
Һаҡларға тыуған ерҙе.
Ут-ямғыры яуған күктән,
Янған ауыл-ҡалалар.
Азатлыҡ тип башын һалған
Бик күп ата-бабалар.
Олатайым батыр булған,
Дошманды ҡыуған илдән.
Фашистарҙы тар-мар итеп,
Ҡайтҡан ул Еңеү менән.

Бөгөн олатай ауылда -
Һуңғы тере ветеран.
Орден-миҙалдарын ҡарап,
Мин уйланып ултырам.
Еңеү көнөн ҡаршылайбыҙ
Мәңгелек ут янында.
Тарих онотолмаç әле
Беҙ – ейәндәр барында.
(З.Ҡотлогилдина)

## ӨЛӘСӘЙ ҘӘ – ЕҢЕҮСЕ

Олатай һуғышта саҡта
Өләсәй иген иккән.
Урман ҡырҡкан, мал ҡараған,
Фронтҡа ярҙам иткән.
Йылы ойоҡ-бейәләйҙәр
Һалдаттарға бәйләгән.
Ас-яланғас булғанда ла,
Еңеү йырын көйләгән.
Хатта кескәй балалар ҙа
Ҙурҙар кеүек эшләгән.
Иң-иң ауыр саҡтарында
Атайҙарын иçләгән.
Күп сабыйҙар онотоп бөткән
Икмәктең ни икәнен.
Өшөн-туңып көткән улар
Еңеү яҙы еткәнен.
Шундай ҡыйын ваҡытта ла
Саҡырған мәктәп, белем.
Өмөт, ышаныс булғанға
Дошманды еңгән илем.
(З.Ҡотлогилдина)

## **ЕҢЕҮ КӨНӨ**

Болондарҙы күмеп майҙың
Нәфис гөлөнә,
Еңеү көнө балҡып килде
Тыуған илемә!
Тик еңеү үҙенән-үҙе
Килмәне ергә;
Уны яҡлап ҡаһармандар
Көрәште бергә!
«Мәңгелек дан!» — тигән кеүек
Батыр халҡыма,
Май ҡояшындай нурланып,
Байраҡ талпына!
(А.Игебаев)

## **ОЛАТАЙҘЫҢ ФОТОҺЫ**

Олатайҙың фотоһын
Ҙурайтып алып ҡайттыҡ.
Түр яҡҡа рәтләп ҡуйғас,
Күмәкләп уға баҡтыҡ.
Атайымдың атаһы
Шундай шат ҡарап тора.
Күкрәгендә аҡ миҙал
Янып-ялтырап тора.
Такист булған олатай,
Ҡалаларҙы алған ул.
Ерҙе уттан ҡурсалап,
Еңеүгә юл ярған ул.

Һөрөм ҡунған йөҙөндә
Яуҙарҙың ҡалған эҙе.
Тарих һөйләп тора ул,
Сыҡмаһа ла бер һүҙе.
Әйттем:"Нишләмәç инем,
Булһаң икән һин тере.
Һиңә, олатайыма,
Оҡшаған, - тиҙәр мине. -
Икәүләп йөрөр инек
Төпһөҙ күлгә балыҡҡа.
Баҡса үçтерер инек
Үҙебеҙгә, халыҡҡа.
Мин дә шинель кейермен,
Ваҡыт еткәс, бер көндө,
Һиңә оҡшағанмын бит -
Ҡыйыу һаҡлармын илде".
(М.Ғәли)

Еңеү! Һағындырған данлы еңеү!
Ҡосаҡланы бөгөн илемде.
Йөрәктәрҙән шатлыҡ ташты урғып,
Бар донъяның баçып киңлеген.
(Ф. Бикбов.)

Һәйкәл тора. Имеш, һөйләйҙәр,
Был — билдәһеҙ һалдат һәйкәле.
Билдәһеҙме ошо баҡыр кеше?
Билдәһеҙме, хәтер, әйт әле?!

Атакаға күтәрелдек бергә,
Йыға һуҡты әжәл бер мәлде.
Ваҡытлыса йәйә тереләдем мин,
Ул — мәңгелек һынға әйләнде.

Ҡаршыһында түтәл-түтәл гөлдәр
Изге ялҡын булып яналар,
Баш өҫтөндә таңдан ҡоштар һайрай,
Эргәһендә һайрай балалар.

Ә артында уның сал бер ҡатын
(Ил инәһе — улдыр, моғайын.)
Нисәмә йыл инде өнһөҙ илай,
һалҡын ташҡа терәп маңлайын.

Еңеү! Ҡояш балҡый бер битеңдә,
Бер битеңдә — моңһоу ай һаман,
Бер күҙеңдән шатлыҡ нуры һибелә,
Бер күҙеңдән әсе йәш тама...

1965

Мостай Кәрим.

Ҡанлы яуҙан ҡайтмай ҡалған ирҙәр ,
Әйтерһең дә, ергә аумаған.
Ул һалдаттар, аҡ торналар булып,
Осоп киткән зәңгәр һауаға.

Әле һаман ошо яугирҙәрҙең
Тауыштары килә алыҫтан.
Юҡҡамы ни, һауаларға ҡарап,
Күңелебеҙ тула һағышҡа.

Ҡанаттары талып, ҡош сылбыры
Оса таңда, оса кисен дә.
Шул сылбырҙа кескәй буш урын бар,
Ул буш урын минең өсөндөр!

Бер көн мин дә торна сылбырында
Юғалырмын инеп томанға.
Йәнем иңрәр моңһоу бер ҡош һымаҡ,
Ерҙәгеләр ғәзиз булғанға.
Рәсүл Ғамзатов *(Раuил Бикбаев тәржемәһе)*.

# Ветеран көҙгө алдына

(Ейән ауыҙынан)

Туғыҙынсы май иртәһе.
Бүлмәбеҙ тулы нурҙар.
Мөйөштәге радионан
Урғыла көйҙәр, йырҙар.

Миҙалдарын зыңғырлатып
Олатай тағы түшкә,
Икеләтә байрам килде:
Бөгөн ул - алтмыш биштә.

Эй тапана олатайым
Ҙур көҙгө алдарында,
Бейеп үк китә осҡондар
Таҡҡан миҙалдарында.

Яҡтырып, ҙурайып киткән
Өйөбөҙҙөң эстәре,
Танауҙы рәхәт ҡытыҡлай
Тәмле ҡоймаҡ еҫтәре.

Өләсәйем өтәләнә:
- Ултыр сәйгә, ҡуй ҡана!
Олатай көҙгө алдында
Һылана ла һыйпана.

Битен һыпырған була ла
Текләп ҡала бер аҙҡа...
(Юйылырға һалынмайҙыр
битт әргә һыр-бураҙна.)

Шул саҡ күҙ ҡыҫты мут ҡына
Китаптар кәштәһенән
Бер портрет...
Олатайым! -
Егерме йәштә генә,
Тап минең йәштә генә!

*Аҫылғужа Баһуманов.*

**ГЕРОЙ**

Олатайым менән бергә
Сығам парадҡа.
Был байрамды ул бит көткән,
Ифрат яраткан!
Беҙгә бәхет яулар ҡсҡн
Дошманды еңгән.
Һүрәттә булһа ла бөгөн –
Ул минең менән!
Тыныслыҡты һаҡлағыҙ, ти
Олатам күҙе.
Ғорур барам, күтәргәндәй
Геройҙың үҙен!

**БИЛДӘҺЕҘ ҺАЛДАТ**

Ҡарт Кремль стенаһын ялмап
Мәңгелек ут яна яй ғына.
Бөгөн тағы шул ялҡынға ҡарап,
Яугир дуҫты күңел һағына.

Ул – билдәһеҙ һалдат. Ергә ауған
Мәскәү өсөн барған һуғышта.
Үлемесле яуҙа утта янған
Һәм ут булып ҡалған тормошта.

Юҡ, билдәһеҙ түгел. Икәү йәнәш
Һаман атта елгән кеүек ул.
Әйтерһең дә, яугир миңә йәштәш,
Бар үлемде еңгән егет ул.

Исеме кем? Бәлки, икәү бергә
Яуға килгәнбеҙҙер Уралдан.
Үәҙер яугир миңдәр йөрәгенә
Мәңгелек ут булып уралған.

Кем һуң беҙ баш эйгән шул баһадир,
Рус булғанмы, әллә башҡортмо?
Кем булһа ла, ул – үлемһеҙ батыр,
Яҡлаған ул ерҙә халыҡты.
Уйға сумып һүҙһеҙ баҫып торам,
Йәшлек йәшнәй ярһыу ҡанымда.
Мин яугирҙы һаман тере тоям,
Мәңгелек ут яна янымда.
(Яҡуп Ҡолмай(

# ДУҪЛЫҠ

Боҙло окоптар төбөндә
Өшөһәк тә, туңһаҡ та,
Ут ҡойондары эсендә
Дөрләй-дөрләй янһаҡ та,
Дуҫлыҡҡа тап төшөрмәйсә
Йәшәнек беҙ, уҡмаштыҡ,
Шатлыҡты ла, ҡайғыны ла
Үҙ-ара уртаҡлаштыҡ.
Бер һыныҡ икмәк эләкһә,
Тип-тигеҙ бүлеп ҡаптыҡ.
Пуля өтөп, урыҫ ауһа,
Башҡорт алды урынын,
Башҡортҡа әжәл киҙәнһә,
Татар ҡуйҙы яурынын.
Бер теләкле,
Көс-ғәйрәтле
Дуҫлыҡ фашисты еңде,
Рейхстагтың көмбәҙенә,
Ҡатр ер шарын таң ҡалдырып,
Еңеү байрағын элде!
(Файыҡ Мөхәмәтйәнов)

## ОЛАТАЙҘАРЫМА

Миҙал таҡҡан олатайҙар
Байрамдан ҡайтып килә.
Йөрәк әллә нишләп китте:
Олатай кәрәк миңә!

Ҡайҙа ҡарт олатайҙарым?
Әйтсе, зинһар, өләсәй?!
Өләсәйем ҡаушап ҡалды
Ни әйтергә лә белмәй.

Әйтте: “Ҡарт олатайҙарың
Һуғышта йән биргәндәр,
Ерҙә тормош дауам итһен,
Йәшәһен, тип, ейәндәр.

Батырҙарса һәләк булған
Олатайһарың һинең.
Сабый инем мин үҙем дә,
Ә һин әле юҡ инең”.

Ерҙә тормош дауам итһен,
Донъялар булһын имен!
Һеҙгә арнайым йырымды,
Олатайҙарым минең!

Муниципаль мәктәпкәсә белем  биреү бюджет учреждениеһы
Бала үҫтереү үҙәге – “Аҡбуҙат” балалар баҡсаһы

# ЕҢЕҮ БАЙРАМЫ ҺӘМ ВЕТЕРАНДАР ТУРАҺЫНДА ШИҒЫРҘАР




Әҙерләне: Ҡоломбәтова Ф.Ш.


БЕР КЕМ ДӘ
ОНОТОЛМАҒАН


Бөйөк
Еңеү көнө
менән ҡотлайым!